**Иҫәнбаев Денис Фәнил улы** 1988 йылдың Башҡортостан Республикаһының Ауырғазы районы Төрөмбәт ауылында, Фәнил менән Дилара Иҫәнбаевтарҙың татыу ғаиләһендә донъяға килә.

1995 йылда ул Төрөмбәт урта мәктәбенең 1-се класына уҡырға бара. Уҡыу йылдарында Денис тырышлығы, әҙәплелеге менән уҡытыусыларҙың һәм класташтарының ихтирамын яулай. 2006 йылда мәктәпте уңышлы тамамлай. 2006-2011 йылдарҙа Денис Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтында уҡый. Институтта ул юриспруденция нигеҙҙәрен өйрәнә, хоҡуҡ һаҡлау өлкәһендә эшләү серҙәренә төшөнә. Юғары белем алыу менән бер рәттән, спорт менән дә әүҙем шөғөлләнә.

Хеҙмәт юлын 2011 йылда Башҡортостан Республикаһының Ишембай ҡалаһы эске эштәр бүлегендә участок инспекторы вазифаһында башлай. Ул үҙенең эшен яуаплылыҡ менән башҡара, граждандарҙың хоҡуҡтарын яҡлауға ҙур иғтибар бирә. 2012 йылға тиклем Ишембай ҡалаһында хеҙмәт итә.

2013-2014 йылдарҙа Денис Свердловск ҡалаһында хәрби бурысын үтәй. Армияла саҡта ла ул үҙенең яуаплылығын һәм тәртибен күрһәтә. Өлгөлө хеҙмәте өсөн Денис бик күп маҡтау грамоталары менән бүләкләнә, ә ата-әсәһенә командирҙарынан рәхмәт хаттары килә.

2014 йылда Денис Фәнил улы Ҡырымдың Рәсәй составына ҡайтарылыуында ҡатнаша. Был тарихи ваҡиғала ҡатнашыу уның өсөн ҙур мәртәбә була. Ватан алдындағы күрһәткән хеҙмәттәре өсөн "Ҡырымды ҡайтарған өсөн" дәүләт миҙалы менән бүләкләнә.

2022 йылдың 28 сентябрендә Денис Фәнил улы махсус хәрби операция зонаһына мобилизациялана. Һуғыш барышында күрһәткән ҡыйыулығы һәм батырлығы өсөн ***“Хәрби батырлыҡ өсөн” , “Суворов”*** миҙалдарына лайыҡ була. 2024 йылдың 28 апрелендә Денис Донецк Халыҡ Республикаһының Авдеевка ҡалаһында хәрби бурысын үтәгәндә батырҙарса һәләк була. Уның ҡаһарманлығы, Ватанға тоғролоғо мәңгегә халыҡ хәтерендә һаҡланасаҡ. Күрһәткән батырлығы һәм фиҙакәрлеге өсөн Денис Иҫәнбаев үлгәндән һуң ***"Батырлыҡ ордены" һәм "Генерал Шайморатов"*** ордены менән наградлана.